# Башҡорт халыҡ музыка ҡоралдары

# Башкирские народные музыкальные инструменты



БАШҠОРТ АССР-ы КУЛЬТУРА МИНИСТЕРСТВОҺЫ
ХАЛЫҠ ИЖАДЫ ҺӘМ КУЛЬТУРА - АҒАРТЫУ ЭШЕНЕҢ
РЕСПУБЛИКА ҒИЛМИ-МЕТОДИК ҮҘӘГЕ
ӨФӨ ДӘҮЛӘТ СӘНҒӘТ ИНСТИТУТЫ

# Башҡорт халыҡ музыка ҡоралдары

ӨФӨ — 1989

МИНИСТЕРСТВО КУЛЬТУРЫ БАШКИРСКОЙ АССР
РЕСПУБЛИКАНСКИЙ НАУЧНО-МЕТОДИЧЕСКИЙ ЦЕНТР
НАРОДНОГО ТВОРЧЕСТВА И КУЛЬТУРНО-
ПРОСВЕТИТЕЛЬНОЙ РАБОТЫ
УФИМСКИЙ ГОСУДАРСТВЕННЫЙ ИНСТИТУТ ИСКУССТВ

# Башкирские народные музыкальные инструменты

УФА — 1989





Һыҙғырт, ҡурай, үткән ҡайғыларҙы,
Өҙҙөрт, ҡурай, йөрәккәй ҡылдарын;
Һиҙҙерт, ҡурай, ҡайнар тойғоларҙы,
Һөйҙөрт, һөйләп, башҡорт моңдарын.

Мой курай, зазвени, заиграй
Всеми красками звонкого мира.
Все печали развей, мой курай,
Чтобы дрогнуло сердце башкира
(«Ҡурайҡайға». Ш. Бабич)

ДИЛЬМУХАМЕТОВ САЙФУЛЛА ИШГАЛЕЕВИЧ — заслуженный работник культуры БАССР, кураист.

Әй думбырам, думбырам,
Уйна, күңел асылһын,
Думбырам минең уйнайҙыр,
Ҡыл ҡумыҙым, һорнайҙыр,
Тыңлай килгән әҙәмдәр
Үҙен-үҙе белмәйҙер!
(«Заятүләк менән Һыуһылыу» ҡобайырынан).

Башҡорттарҙың рухи һәм материаль культураһында халыҡ музыка ҡоралдары әһәмиәтле урын алып тора.

Ҡурай, ҡумыҙ, думбыра, ҡыл-ҡумыҙ, һорнай, дөңгөр һ.б. боронғо музыка ҡоралдары тураһындағы документаль мәғлүмәттәр быуаттар төпкөлөнә алып китә. XIX быуат аҙағында башҡорттар араһында скрипка, мандолина, гармунда уйнаусылар булыуы билдәле.

XX быуаттың 30-сы, 40-сы йылдарында тәүҙә ҡалала, аҙағыраҡ ауылдарҙа баянда уйнау тарала башлай.

Экономик һәм социаль-көнкүреш шарттар халыҡтың музыкаль культураһына ла йоғонто яһаған. Мәҫәлән, ҡурайҙы табыу еңеллеге, яһап алыу ябайлығы уның халыҡта киң таралыуына булышлыҡ иткән. Сиртмә телле музыка ҡоралы — ҡумыҙ-өйҙә уйнау менән бергә «Ҡарға бутҡаһы» (ҡайһы бер төбәктәрҙә ул «Сәүкә байрамы» исеме менән билдәле), «Кәкүк сәйе» кеүек халыҡ уйындарында ла киң ҡулланылған.

Сиртмә ҡыллы музыка ҡоралы — башҡорт думбыраһы сәсәндәрҙең айырылмаҫ юлдашы булған. Думбыра сыңына ҡушылып, улар ҡобайырҙарҙа ил батырҙарын данлаған, тыуған ерҙең матурлығын маҡтаған, батша хөкүмәте ҡуштандарын фашлаған, социаль һәм колониаль иҙеүгә ҡаршы көрәшергә саҡырған. Уларҙың ижады аяуһыҙ эҙәрлекләнгән һәм XX быуат башында башҡорт думбыраһының юғала башлауы бер ни тиклем ошоноң менән бәйле.





**«Ҡумыҙ эшләргә өйрәнеү миңә ауыр булманы. Яҡшы музыка ҡоралы, йомшаҡ тауышлы».**
**««Кумызы делать я научился без особого труда. Инструмент хороший, нешумный».**

ЗАГРЕТДИНОВ РОБЕРТ АБДРАХМАНОВИЧ — заслуженный работник культуры РСФСР и БАССР. Преподаватель Уфимского педагогического училища № 2.

Ҡыл ҡумыҙ (һыҙмалы) һәм дөңгөр (ҡағып уйналмалы), шулай уҡ тынлы сигнал ҡоралы — һорнай тураһында башҡорттарҙың тарихи һәм фольклор сығанаҡтарында әйтеп үтелә. Һорнай тауышына халыҡ йыйындарға йәки илгә ҡурҡыныс килгәндә йыйылыр булған.

Ҡурай башҡорт ерлегендә барлыҡҡа килгән, һәм ул башҡорт халҡының күп быуатлыҡ тарихын үҙенә һеңдергән. Ҡурайға нисә йәш? Быны шунан ғына ла тоҫмалларға мөмкин: элек-электән тик ҡурайҙа башҡарыла торған башҡорт халыҡ көйө «Сыңрау торна»ның мең йылдан ашыу тарихы бар. «Аҡбуҙат», «Ҡара юрға», «Заятүләк менән Һыуһылыу», «Ҡуңыр буға» һ.б. боронғо башҡорт эпостарында ла ҡурай тураһында бәйән ителә.

Ҡурай башлыса көньяҡ Уралда үҫкән таҡыя башлы ҡурай үләненән эшләнә. Хәрби походтарҙа металдан эшләнгән ҡурай йөрөткәндәр. Халыҡ музыка ҡоралдары оҫтаһы Вәкил Шакирович Шөғәйепов 1976 йылдан алып ағас шпондан натураль стройҙа камертон ярҙамында билдәле тональносҡа көйләнгән ҡурайҙар эшләй башланы. Был ысулға өйрәнеп, хәҙерге көндә Хәйбулла районынан С. Дилмөхәмәтов, өфөләләр А. Йәнғужин, Ғ. Ҡобағошов һәм башҡа оҫталар ҡурай етештерә.

Ҡурайҙың интонацион диапазоны киң булыуы уның моң монарына нескә лириканан патриотик героикаға тиклем олғашырға мөмкинлек бирә. Халыҡта «күкрәккә һалып» уйнау юғары баһалана: ҡурай тауышына тамаҡ төбө өнө ҡушылып, уға үҙенсәлекле, ҡабатланмаҫ фон бирә. Импровизаторлыҡ оҫталығы — шулай уҡ ҡурайҙа башҡарыу традицияһының айырылмаҫ өлөшө.

Башҡорт халыҡ көйҙәренең үҫеш тарихы ҡурай сәнғәте менән тығыҙ бәйле. Мәшһүр ҡурайсылар — талан-





**«Ҡумыҙҙа иң мөһиме — сифат!»**
**«Главное в кумызе — качество!»**

ДАВЛЕТБАЕВ МИННУЛЛА ЛУТФУЛЛОВИЧ
Заслуженный работник культуры БАССР
Руководитель фольклорного ансамбля
Салаватского педучилища.

тлы импровизатор, йәғни, көй-моң аша халҡының тарихи йылъяҙмаһын яҙыусы ла булған.

Үткән быуындарҙан ҡалған көй-моң хазинаһының иң яҡшы өлгөләрен башҡарғанда, ҡурайҙың яңынан-яңы мөмкинлектәре асыла барған, шул нигеҙҙә яңы көйҙәр ижад ителгән. Ҡурайҙа уйнау сәнғәте шул рәүешле быуындан-быуынға камиллаша һәм күсә килгән.

Ҡурай сәнғәтенең тарихында тәрән эҙ ҡалдырған, төрлө йүнәлештәргә, мәктәптәргә нигеҙ һалған атаҡлы ҡурайсы-импровизаторҙарҙың исемдәре билдәле: Ҡобағош сәсән (XV—XVI б.), Байыҡ сәсән (1710—1814), И. Мырҙаҡаев (1780—1877), F. Арғынбаев (1856—1921), Й. Иҫәнбаев (1891—1943), Х. Әхмәтов, И. Дилмөхәмәтов, F. Сөләймәнов, К. Дияров һ.б. Бөгөнгө ҡурайсыларыбыҙ араһында Бөтә донъя студенттар һәм йәштәр, Халыҡ-ара фольклор фестивалдәре, һирәк музыка ҡоралдарында уйнаусыларҙың Бөтә Россия конкурстары лауреаттары, дипломанттары бар.

Халыҡта ҡумыҙға бәйле ошондай легенда һаҡланған: «Бер ваҡыт ярлы егет Бикбай сағандан ҡумыҙ эшләп алып, унда бейеү көйҙәрен уйнарға өйрәнә. Йәштәр ҡырға күңел асырға сыҡҡанда уның ҡумыҙына йырлай, бейей торған булған. Бер көндө Бикбайҙы йыйынға саҡыралар. Ул ҡумыҙ уйнағанда, байҙың оло ҡыҙы Гөлсөм унан күҙҙәрен алмай. Бикбайға ла ҡыҙ бик оҡшай. Шуның билдәһе итеп, Бикбай Гөлсөмгә үҙенең ҡумыҙын бүләк итә...» Легендала саған ҡумыҙ тураһында һүҙ бара. Башҡортостанда элек ҡаҙ ҡауырыйынан, ҡаҙ һөйәктәренән, хатта дөйә тояҡтарынан яһалған ҡумыҙҙарҙың да булғаны билдәле.

Бөгөнгө көндә Башҡортостанда ике төрлө: ағас һәм тимер ҡумыҙ таралған. Ағас ҡумыҙ айырыуса республиканың төньяҡ-көнсығыш районда-





**«Һәр уйнаусы өсөн айырым ҡумыҙ эшләргә кәрәк, бында күмәртәләү ярамай».**
**«Кумыз нужно делать для каждого исполнителя отдельно, здесь не должно быть вала».**

РЫСБАЕВ АМИР МАХМУТОВИЧ
Плотник НГДУ Чекмагушнефть.



яһын яҡшыртыу өҫтөндә эш дауам итә.

Ҡыллы музыка ҡоралы ҡыл ҡумыҙ — скрипканың йыраҡ туғаны, ләкин унда уйнау башҡасараҡ: ҡыл ҡумыҙ иңбашҡа терәп түгел, ә тубыҡҡа, вертикаль ҡуйып уйнала. Әлеге көндә халыҡта ҡыл ҡумыҙ осрамай тиерлек, уны скрипка алыштырған. Ҡайһы бер оло йәштәге кешеләр уны тап ҡыл ҡумыҙ кеүек, вертикаль ҡуйып уйнайҙар.

Башҡорт музыка ҡоралдары оҫталары был инструментты яңынан аяҡҡа баҫтырыу өҫтөндә эшләй. 1988 йылда башҡорт халыҡ музыка ҡоралдары күргәҙмәһендә ҡыл ҡумыҙҙың В. Шөғәйепов тарафынан эшләнгән өлгөһө күрһәтелде. Мәсетле районынан оло йәштәге скрипкасы М. Килмөхәмәтов эшләгән ҡыл ҡумыҙҙың макетында ла скрипканың боронғо туғанын төҫмөрләргә мөмкин.

Башҡортостанда үҙҙәренең иң матур милли традицияларын ҡәҙерләп һаҡлаған башҡорттар, рустар, татарҙар, украиндар, мариҙар, сыуаштар, удмурттар һ.б. йәшәй. Шишмә районынан үҙенең яһалышы менән бик тә үҙенсәлекле, әле исеме лә булмаған музыка ҡоралдары эшләүсе Н. Лузин, Туймазы ҡалаһынан ҡумыҙҙар оҫтаһы Г. Ғабдулхаҡов, рус халыҡ инструменттарының яңы төрҙәрен уйлап тапҡан өфөлө Н. Старостин һәм Күмертау районынан В. Назаровтарҙың ижади эҙләнеүҙәре ҙур ихтирамға лайыҡ. Бөгөн Б. Иҫәнсурин тарафынан яңынан аяҡҡа баҫтырылған һорнай ҙа сәхнәнән яңғырай.

Һуңғы йылдарҙа фольклорға һәм тарихи ҡомартҡыларға ҡыҙыҡһыныу артҡандан арта бара. Йырсыларҙың, ҡурайсыларҙың, ҡумыҙсыларҙың, думбырасыларҙың республикала үткәрелгән һәр төрлө фольклор байрамдарындағы сығыштары халыҡтың милли традицияларҙы, милли культу-





**«Музыка ҡоралдары менән бик һуң шөғөлләнә башлағаныма үкенәм. Элек ҡайҙа йөрөгәнмендер икде...»**
**«Как жалко, что начал заниматься музыкальными инструментами так поздно! Где я раньше был!».**

ТУЙМАКАЕВ ИЛЬДАР ЗАКАРЕЕВИЧ
Методист Музыкального общества БАССР.

рында йыш осрай. Тимер ҡумыҙҙың дуға кеүек, тура мөйөшлө, трапецияға оҡшаш формалары бар. Ҡумыҙҙа ғәҙәттә балалар һәм ҡатын-ҡыҙҙар уйнаған. Ҡатын-ҡыҙҙар аулаҡҡа йыйылғанда, ҡумыҙға ҡушылып, йырлап-бейеп күңел аса торған булғандар.

Ҡумыҙ төрлө музыка ҡоралдары менән бергә лә матур яңғырай. Мәҫәлән, ҡумыҙҙың дөңгөр һуғыу, батмус сиртеү менән оҙатылған ансамбле үҙенсәлекле. Ансамблдәге ҡыҙҙарҙың түшелдеректәрендәге, сәсмәүҙәрендәге тәңкәләрҙең сыңлауы ла өҫтәлмә аккомпанемент булып яңғырай.

һуңғы йылдарҙа Башҡортостанда ҡумыҙҙың оригиналь төрҙәре эшләнә башланы. Р. Заһретдиновтың ҡумыҙҙары үҙҙәренең киң диапазонлы булыуы менән айырылып тора. Уларҙа көй уйнауҙан тыш күп төрлө имитация алымдары, оҡшатыу тауыштары ла сығарырға мөмкин.

Икенсе оҫта — И. Туймаҡаев — ағастан төрлө тауыштар сығарыусы музыка ҡоралдары яһай. Улар үҙенең ҡабатланмаҫ, үҙенсәлекле эшләнеше, уғата еңел уйналыуы, шул уҡ ваҡытта был инструменттарҙы дөйөм классификациялау рамкаларына индереп булмауы менән характерлы. Р. Заһретдинов, И. Туймаҡаев кеүек оҫталар республиканың башҡа төбәктәрендә лә бар: Салауат ҡалаһынан М. Дәүләтбаев, Бөрйән районынан М. Мәхмүтов, Дүртөйләнән А. Рысбаев, Илеш районынан аталы-уллы Йәнгировтар һ.б.

Бөгөнгө көндә кем тимер ҡумыҙ менән ҡыҙыҡһына, уны Өфө магазиндарында һатып алырға мөмкин.

Бынан 100 йыл элек рус ғалимы С. Г. Рыбаков башҡорт ауылында беренсе тапҡыр гармун күргән. Гармун бигерәк тә республиканың көнбайыш, төньяҡ-көнбайыш, төньяҡ-көнсығыш регионадарында, шулай уҡ





раны һаҡлауға ынтылышын асыҡ күрһәтә.

1989 йылдың 23 мартында Россияла беренсе булып автономия алған Башҡортостан үҙенең 70 йыллыҡ юбилейын билдәләне. Ете тиҫтә йыл эсендә республикабыҙҙың музыкаль культураһы офоҡтары ауыҙ-тел ижады традицияларынан музыкаль классика өлгөләренә тиклем киңәйҙе.

Музыкаль культураның көсө-халыҡ ижады ынйыларынан һут алыуында. Әйҙә был йәншишмәләр киңәйеп, халыҡ ижады тип аталған киң дарьяға әүерелһен!



В материальной и духовной культуре башкир значительное место занимают народные музыкальные инструменты. В глубину веков уводят исторические сведения о древнейших инструментах: курае и кубызе, думбыре, кыл-кумызе, сорнае и дунгуре. В конце XIX века в среде башкирского населения зафиксированы инструменты европейского происхождения: скрипка, мандолина и гармоника. В 30-е, 40-е годы XX века вначале в городе, позже на селе, становится популярным баян.

Экономический и социально-бытовой уклад оказывал воздействие и на музыкальную культуру башкирского







**«Минең хыялым — алтын телле, көмөш тауышлы гармун эшләү».**
**«Моя мечта — сделать гармонь с серебряными голосами на золотых планках».**

МУХАЯРОВ ЗИДИЯТ ШАКИРОВИЧ
Мастер по изготовлению тальянок Производственного комбината «Дружба».

народа. Так, простота конструкции и доступность материала, из которого изготавливается курай, способствовали его популярности в народе.

Язычковый музыкальный инструмент — кумыз — встречался не только в домашнем музицировании, но и при проведении народных игр, таких, как «Воронья каша» (в некоторых регионах он известен под названием «Праздник грачей»), «Кукушкин чай» и др.

На струнном щипковом инструменте — башкирской думбыре — в давние времена играли сказители — сэсэны. Под аккомпанемент думбыры они в кубаирах прославляли подвиги батыров, воспевали красоту родной земли, бичевали царских прислужников, призывали к борьбе против социального и колониального гнета, по сути являясь совестью народа. Видимо поэтому их творчество подвергалось гонению и явилось одной из причин исчезновения думбыры на территории Башкирии в начале XX века.

Кыл-кумыз (смычковый) и дунгур (ударный), а также сигнальный инструмент сорнай упоминаются в фольклорных источниках башкир. Так, на звуки сорная народ собирался на йыйыны — народные праздники, или когда Родине угрожала опасность.

Курай — коренной житель Башкирии, и вобрал он в себя многовековую историю народа — своего создателя. О древности курая говорит, например, такой факт: башкирская народная мелодия «Звенящие журавли», исполняемая только на курае, имеет более чем 1000-летнюю историю. Об этом же свидетельствуют упоминания о курае в древних башкирских эпосах «Акбузат», «Кара-Юрга», «Заятуляк и Хыухылу», «Кунгыр буга» и др.

Традиционный курай изготавливается из полого стебелька зонтичного растения, которое также называется курай. В военно-походных условиях






**«Бөтә музыка ҡоралдары ла уйлап табылып бөтмәгән әле».**
**«Еще не все музыкальные инструменты придуманы».**

ЛУЗИН НИКОЛАЙ ДМИТРИЕВИЧ.
Художественный руководитель сельского Дома культуры.

применялся металлический курай. С 1976 года народным мастером Вакилем Шакировичем Шугаюповым изготавливаются кураи из деревянного шпона, установленные с помощью камертона в натуральном строе на определенную тональность.

Интонационный диапазон курая необычайно широк. В нем грусть и радость, сила и хрупкость, нежная лирика и эпическая возвышенность. В традиционном исполнении обязательно присутствует грудной гортанный звук, который создает оригинальный фон и придает напеву своеобразие и неповторимость. Неотъемлемой чертой исполнительской традиции также является импровизаторское мастерство. Развитие башкирского народного мелоса и совершенствование исполнительского искусства на курае теснейшим образом взаимосвязаны. Выдающиеся кураисты были и прекрасными импровизаторами, в своем роде летописцами истории народа, и в то же время при исполнении лучших образцов музыкального творчества предшествующих поколений совершенствовалось и прибавлялось мастерство, открывались все новые и новые возможности инструмента. Из поколения в поколение искусство игры на курае бережно хранилось и передавалось народом. Известны имена выдающихся кураистов-импровизаторов—основателей различных школ, направлений в истории искусства игры на курае—это Кубагуш-сэсэн (XV—XVI вв.), Баик-сэсэн (1710—1814), И. Мырзакаев (1780—1877), Г. Аргынбаев (1856—1921), Ю. Исянбаев (1891—1943), Х. Ахметов, И. Дильмухаметов, Г. Сулейманов, К. Дияров и другие. Среди кураистов наших дней имеются лауреаты и дипломанты Всемирных фестивалей молодежи и студентов, Международных фольклорных фестивалей, Всероссийских конкурсов исполнителей на редких музыкальных инструментах.

О происхождении кумыза в народе





сложена легенда: «Однажды бедный пастух-сирота Бикбай смастерил себе кумыз из клена и научился играть на нем плясовые мелодии. Когда молодежь выезжала в поле, то пела и плясала под его кумыз... Как-то Бикбая пригласили на йыйын. Когда он играл на кумызе, то все девушки плясали под его музыку, а старшая дочь бая Гульсум непрерывно на него смотрела. Бикбаю тоже нравилась эта девушка. В знак своего расположения он подарил ей свой кумыз». В легенде говорится об инструменте из клена, но мало кто знает, что в Башкирии в прошлом изготавливались также кумызы из гусиного пера, гусиной косточки и даже из верблюжьего копыта.

Бытуют в Башкирии две разновидности кумыза: деревянный и металлический. Деревянный кумыз особенно популярен в северо-восточных районах Башкирии. Металлический может иметь дугообразную, прямоугольную, трапецевидную форму.

У башкир кумыз обычно считался детским или женским инструментом. Собираясь на «аулак», женщины обычно брали с собой кумыз и тайком музицировали на нем. Тихое звучание инструмента давало возможность играть, не привлекая внимания посторонних. Игра на кумызе может сочетаться с различным составом инструментов. Характерен ансамбль кумыза с дунгуром, а также с подносом, на котором выбивается определенный ритмический рисунок при помощи наперстков, надетых на пальцы. При этом дополнительный аккомпанемент издают монеты на нагруднике, на косах участниц ансамбля.

В последние годы в Башкирии стали создаваться оригинальные образцы кумызов. Усовершенствованные инструменты мастера Р. Загретдинова обладают широким диапазоном. На них кроме исполнения мелодий, возможны многообразные подражательные и имитационные приемы с усложненными ладово-ритмическими ри-





**«Яҡшы музыкант тәрбиәләү өсөн яҡшы музыка ҡоралы кәрәк».**
**«Без хорошего инструмента нельзя воспитать хорошего музыканта».**

ШУГАЮПОВ ВАКИЛЬ ШАКИРОВИЧ.
Заслуженный деятель искусств БАССР. Мастер по изготовлению народных инструментов при Музыкальном обществе БАССР.

сунками. Другой мастер — И. Туймакаев — изобрел целый ряд самозвучащих инструментов. Оригинальный внешний вид, прекрасный «дизайн», необыкновенная легкость овладения игрой, и в то же время невозможность уложить инструменты в рамки общепринятой классификации — вот характеристика творчества мастера из Зианчуринского района. Р. Загретдинов и И. Туймакаев не одиноки в своих исканиях. Изготовлением кумызов занимаются М. Давлетбаев из г. Салавата, М. Махмутов из Бурзянского района, А. Рысбаев из пос. Дюртюли, отец и сын Янгировы из Илишевского района и многие другие.

Сегодня всех, кто интересуется этим инструментом, приглашают фирменные магазины Уфы, где можно приобрести тимер-кумыз в качестве сувенира и инструмента для музицирования.

Около 100 лет назад русский исследователь С. Г. Рыбаков впервые увидел в башкирском селе гармонь. Широко распространена гармоника особенно в западном, северо-западном, северо-восточном регионах республики, а также у пермских и мензелинских башкир. Несколько десятков башкирских мастеров не успевают выполнять многочисленные заказы. Самым маститым из них по праву считается З. Ш. Мухаяров — победитель конкурса мастеров-тальянистов 1986 года. Его гармони «Шатлык» и «Дуслык» можно купить в фирменном магазине «Агидель» в Уфе или заказать их в производственном объединении «Дружба». Если же любители хотят иметь уникальную и единственную в своем роде гармонь, они могут сделать индивидуальный заказ у того же мастера З. Мухаярова или обратиться к местным умельцам, таким, как Ф. Саитгареев из г. Салавата, Г. Халитов из с. Стерлибашево, Р. Салимгареев из Татышлинского района и другим, чьи работы радуют не только своим неповторимым внеш-





**«Һорнай тауышында быуаттар ауазы ишетелә».**
**«В звучании ҫорная слышны века».**

ИСАНЧУРИН БАТЫР АХМАДУЛЛОВИЧ
Сотрудник Башгоспединститута.

ним видом, но и своеобразным тембром.

В музыкальном инструментарии башкирского народа вместе с кураем, кумызом и гармоникой хорошо уживаются мандолина и скрипка. Корни музицирования на них уходят в глубокую древность — к думбыре и кыл-кумызу. Возможно трудно было самодельной думбыре соперничать с фабричной мандолиной, тем не менее любовь и бережное отношение к своему прошлому не позволили народу забыть свои характерные инструменты. Так началось восстановление думбыры.

Конечно, исполнители прошлых веков с трудом узнали бы в той лакированной красавице, которую сделал мастер, заслуженный деятель искусств БАССР В. Шугаюпов, старинный инструмент сэсэнов, а ведь кроме него свой вариант думбыры представил Г. Кубагушев. Комиссия Уфимского государственного института искусств рекомендовала к выпуску думбыру В. Шугаюпова. Работа над улучшением конструкции продолжается.

Другой струнный инструмент — кыл-кумыз — является древним родственником скрипки; только при игре он не прикладывается к плечу, а ставится на колено вертикально. Кыл-кумыз сегодня почти не встречается в музыкальном быту башкир, его заменила скрипка, которую многие пожилые исполнители держат вертикально, подобно старинному прототипу. Сейчас башкирскими мастерами ведется работа по восстановлению этого музыкального инструмента. Так, на выставке башкирских народных музыкальных инструментов в 1988 году был показан изготовленный В. Шугаюповым опытный образец кыл-кумыза. А также в макете кыл-кумыза, который сделал пожилой





КИЛЬМУХАМЕТОВ МУХАМЕТДИН КИЛЬМУХАМЕТОВИЧ с макетом кыл-кумыза.

**«Халыҡ ижады, балалар — минең тормошом».**
**«Фольклор, дети — это моя жизнь».**

◀ СТАРОСТИН НИКОЛАЙ ГЕННАДЬЕВИЧ
Преподаватель музыки СШ № 2, г. Уфы.

скрипач М. Кильмухаметов из Мечетлинского района, есть все, чтобы считать его далеким предком скрипки.

В Башкирии живут, бережно храня свои национальные традиции, башкиры, русские, татары, украинцы, марийцы, чуваши, удмурты и другие. Необычные конструкции, которым пока нет имени, придумывает мастер Н. Лузин из Чишминского района, оригинальные кумызы мастерит Г. Габдулхаков из г. Туймазы, поддерживают традиции изготовления русских народных инструментов Н. Старостин из г. Уфы и В. Назаров из Кумертауского района. Звучит со сцены старинный хорнай, восстановленный уфимцем Б. Исанчуриным.

Последние годы отмечены возрастанием интереса к истории и фольклору. В связи с этим усилилась забота о памятниках истории и культуры, развитии многонационального искусства. В республике стали проводиться многочисленные праздники фольклора. Выступления в них певцов, кураистов, кумызистов, исполнителей на гармониках, думбыре, многочисленных инструментальных ансамблей показали стремление к сохранению традиций народного исполнительского искусства, национального инструментария на современном этапе.

23 марта 1989 года Башкирия отметила свое 70-летие. Башкирский народ гордится тем, что первым в России получил государственную автономию. За семь десятилетий диапазон музыкальной культуры республики расширился от творчества устной традиции до высоких образцов музыкальной классики. Сила музыкальной культуры — в ее связи с народными истоками.

Пусть эти истоки ширятся и сливаются в один большой поток, имя которому — народное творчество!



## РЕКЛАМА БУКЛЕТЫ

Текст авторҙары — Ю. Ғәйнетдинов, Н. Әхмәтйәнова, Р. Рәхимов.

Башҡортсаға Х. Әйүпова тәржемә итте.

Рәссамы — Н. Хәлисов.

В. Жарков, И. Ниғмәтйәнов, О. Полянский фотолары.

Сығарылыцы өсөн яуаплы — Ф. Абсаликова.

## РЕКЛАМНЫЙ БУКЛЕТ

Авторы текста — Ю. Гайнетдинов, Н. Ахметжанова, Р. Рахимов.

Перевод Х. Аюповой.

Художник — Н. Халисов.

Фотоиллюстрации В. Жаркова, И. Нигматьянова, О. Полянского.

Ответственный за выпуск — Ф. Абсаликова.

П11476. Уф. ГЖТ. Зак. Г356. 2 руб.